Зөһрә АЛТЫНБАЕВА

# Рәхмәтлемен, “Ватандаш”ым!



“Ватандаш”ым! Һине ихлас күңелдән күркәм юбилейың менән ҡотлайым! Һин минең өсөн үтә лә ҡәҙерле! Халҡыбыҙҙың булмышына, ынтылыштарына, үткәненә иғтибарлы һәм ихтирамлы, заманыбыҙға лайыҡлы ауаздаш булыуың менән күңел түрендә йәшәйһең.

Журналға нигеҙ һалыныуҙың тәүге көндәренән үк һинең тормошоң менән ҡайнап йәшәнем. Ғүмер юлымда “Ватандаш” кеүек абруйлы баҫмала ике тиҫтәгә яҡын йыл эшләүем күңелемдә яҡты уйҙар менән бәйле. Журналда бүлек мөхәррире булараҡ миңә эште баш мөхәррир, академик Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов, шағир Рәмил Йәнбәк менән башлап китергә насип булды.

Оло йөрәкле шәхес — Ғайса Батыргәрәй улына оло ышанысы, артабан ихлас ярҙамы өсөн сикһеҙ рәхмәтлемен. Уға алмашҡа килгән Фәрит Вафа улы Әхмәҙиев айырыуса ижади атмосфера тыуҙыра алды. Журналыбыҙ үҙ уҡыусыһын тапһын, ҡуйылған маҡсаттарға яуап бирһен өсөн улар күп көс һалды.

Артабан танылған публицистар Рәүеф Хәй улы Насиров, Ризван Закирхан улы Хажиев, күренекле яҙыусы Таңсулпан Хизбулла ҡыҙы Ғарипова, яуаплы сәркәтибебеҙ Мәликә Сәлимйән ҡыҙы Әминева һәм башҡалар менән эшләргә тура килде.

“Ватандаш”та мин оҙаҡ йылдар мәҙәниәт һәм сәнғәт бүлектәрен, артабан әҙәбиәт бүлеген дә етәкләнем. Ошо арауыҡ эсендә бихисап сәнғәт йондоҙҙарын астыҡ, халыҡ күңеленә хуш килгән, улар күтәп алған күркәм әҙәби әҫәрҙәр донъя күрҙе журналыбыҙҙа. Авторҙарыбыҙҙың өр-яңы әҫәрҙәрен иң элек “Ватандаш”ҡа тәҡдим итергә ынтылыуы күңелдәрҙе тағы күтәрә ине.

Журнал уҡыусыларыбыҙ менән осрашыуҙар ҙа бик матур һәм күңелле үтә торғайны, улар менән яҡындан аралашыу яңы ижади табыштарға булышлыҡ итте.

Тап “Ватандаш”та эшләү осоронда бихисап очерктар, һүрәтләмәләр, парсалар яҙылды, өр-яңы шиғри шәлкемдәр ижад ителде. Һөҙөмтәлә, яңы китаптар донъя күрҙе. Шуға ла мин журналыбыҙға сикһеҙ рәхмәтлемен. Берҙәм коллективтың уңышлы хеҙмәт емеше лайыҡлы баһа табыуына шатмын.

“Ватандаш” журналының баш мөхәррире Азамат Рәмил улы Юлдашбаевҡа һәм уның берҙәм, тоғро, уңған, эҙләнеүсән, эшсән коллективына киләсәктә лә өр-яңы уңыштар, табыштар теләйем. Ижад ҡомарығыҙ арта барһын, “Ватандаш” ватандаштарыбыҙҙы ҡыуандырып, алға әйҙәп торһон!